# Мөрәжәғәттәр иғтибарға лайыҡ

**“Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһы – халҡыбыҙға актуаль проблемаларҙы хәл итергә һәм тормош сифатын яҡшыртырға мөмкинлек биреүсе инструмент. Уның маҡсаты – урындағы һорауҙарҙы хәл итеүгә халыҡты йәлеп итеү, граждандарҙың әүҙемлеген күтәреү һәм территориаль йәмәғәт үҙидаралығын үҫтереү.**

Программа сиктәрендә тормошҡа ашырыу өсөн өҫтөнлөклө проекттар һайлап алына, артабан ул эштәр софинанслана һәм контролдә тотола. Был проекттың төп йүнәлештәре булып йәмәғәт территорияларын төҙөкләндереү, социаль инфраструктура объекттарын төҙөү һәм ремонтлау, мәҙәниәт һәм спортҡа ярҙам итеү һорауҙары ҡала килә.

Быйылғы йылда ла райондың күп кенә ауылдары программала ҡатнашыу теләгән белдерҙе, уларҙа кәңәшмәләр үтте, инициатив төркөм һайланды. Проекттарҙың күбеһе был юлы ла зыяраттарҙың кәртәләүҙәрен яңыртыуға ҡағыла. Мәҫәлән, Прибельский утарында (Түбәнге Бикҡужа ауыл биләмәһе), Муса (Яңы Петровка), Ибрай (Ибрай), Теләүембәт (Теләүембәт), Вәлит (Ялсы), Волостновка (Волостновка), Ишбирҙе (Ишбирҙе) ауылдарында тап ошо мәсьәләне хәл итергә ҡарар иткәндәр.

Обелискыларҙы, монументтарҙы, уларҙың территорияларын төҙөкләндереү популярлыҡ буйынса икенсе урында тора. Воскресенск (Заречье), Бикбулат (Урал) һәм Үрге Санъяп (Санъяп) ауылдарында проект ярҙамы менән ошо эштәрҙе эшләп ҡуйырға ниәтләйҙәр.

Башҡа ауылдар халҡы ла мөһим проекттар тәҡдим иткән. Үрге Сирбай (Күгәрсен) халҡы ауыл клубының ҡыйыҒын алмаштырырға, ибраһимдар (Юлдыбай) аҫылмалы ҡоролмаһы менән трактор алырға, Побоищела йәшәүселәр Яңы төҙөлөш һәм Көньяҡ урамдарына ҡырсын түшәргә уйлай.

Райондың төрлө мөйөшөндә “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһы сиктәрендә төрлө мәҙәни һәм спорт саралары үткәрелә. Халыҡ программала ҡатнашып, республика һәм район бюджетынан аҡса йәлеп итеп, урындағы проблемаларҙы уңышлы хәл итеүгә ышана.

**Азамат ҒӘҘЕЛШИН.**

***Программалар – ғәмәлдә***

# Мәңгелек йортто тәртиптә тотоу – тереләрҙең бурысы

**“Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү”, “Аныҡ эштәр” программалары халыҡ араһында киң танылыу алды. Билдәле булыуынса, программалар буйынса урындарҙа теге йәки был социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн республика ҡаҙнаһынан аҡса бүленә, уның бер ни тиклем өлөшөн халыҡ, бағыусылар, урындағы бюджет күтәрә.**




*Урындағы халыҡ әүҙем*

Һәр ауыл биләмәһендә лә мөһим социаль мәсьәләләр байтаҡ, әлбиттә. Дөйөм йыйылышта фекер алышып, уларҙың ҡайһыһын тәүҙә тормошҡа ашырыуҙы халыҡ үҙе хәл итә. Мәҫәлән, ҡайһы бер ауылдар зыярат кәртәләй, икенселәр балалар өсөн ял майҙансығы, обелискылар төҙөй, өсөнсөләр урамдарға таш түшәтә, клубтарҙы ремонтлай һ.б.

Яңы Петровка ауыл биләмәһе йыл да был программаларҙан ситтә ҡалмай.

- “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһы бик кәрәкле тип иҫәпләйем. Быға тиклем уның ярҙамында Сәйетҡол ауылының Өҫкө һәм Аҫҡы урамдарына таш түшәлде, Бикеш ауылындағы урыҫ зыяраты кәртәләп алынды.

Быйыл иһә Муса ауылындағы зыяратты тимер ҡойма менән кәртәләп алырға ниәт ҡорҙоҡ. Зыярат ул - мәңгелек уртаҡ йортобоҙ, һуңғы төйәгебеҙ. Һәр беребеҙҙең ата-бабалары шунда ята. Шуға ла был изге йортто ҡарап, тәрбиәләп, төҙөк хәлдә тотоу – һәр беребеҙҙең бурысы.

Программа беҙгә изге ниәтебеҙҙе тормошҡа ашырырға ярҙам итер, тип ышанабыҙ, - ти ауыл биләмәһе башлығы Хөсәйен Аллабирҙин.

# Ниәттәре изге

**2007 йылда Рәсәйҙә башланғыс алған, Башҡортостанда 2014 йылдан бирле уңышлы эшләп килгән “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһы халыҡ өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итергә мөмкинлек бирә.**

Программаның үҙенсәлеге шунда: проектта ҡатнашыу өсөн мөһим мәсьәләне халыҡ үҙе һайлай, инициатива күрһәтә һәм был эште атҡарып сығыуға ҙур өлөш индерә. “Ашаған белмәй, тураған белә” тигәндәй, үҙ көсө һалынған теге йәки был эштең һөҙөмтәһе лә ҡәҙерле: төҙөлгән, төҙәтелгәнгә, һатып алынғанға, әлбиттә, аҙаҡтан һаҡсыл ҡараш була.

Чапаев ауыл биләмәһе халҡы йыл да был программала ҡатнаша һәм уның ярҙамында Подгорный ауылындағы халыҡ өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итергә тырыша. Мәҫәлән, уҙған йылдарҙа улар проектта еңеп сығып, ауыл мәҙәниәт йортон ремонтлаған.

Чапаев ауыл биләмәһе башлығы Любовь Назарова әйтеүенсә, Подгорный ауылы халҡы бөгөнгөһөнә, киләсәгенә битараф түгел. Улар “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһында ҡатнашыу хаҡындағы хәбәрҙе йәнә дәррәү күтәреп алған, инициатив төркөм һайланған. Ниәттәре изге: конкурста еңеп сыҡҡан осраҡта, ауылдағы зыяратты тимер ҡойма менән кәртәләү.

- “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһы беҙгә изге ниәтебеҙҙе тормошҡа ашырырға ярҙам итер, тип ышанабыҙ, - ти Любовь Вячеславовна.

**Гөлназ СӘЙЕТБАТТАЛОВА материалдары.**
**Фотолар ауыл биләмәһе архивынан алынды.**



*Дөйөм йыйылыш барышы*

# Ярҙамдан ташламайбыҙ!

**Тыуған илебеҙ именлеген һаҡлаусыларға, яҡлаусыларға республика, беҙҙең район халҡы даими рәүештә ярҙам итеп тора. Был изге эштән берәү ҙә ситтә ҡалмай, тиһәм, һис хата булмаҫ, моғайын.**




*Ҡасҡын ауылы уңғандары*

***Беҙгә яҙалар***

Ошо көндәрҙә Санъяп ауыл биләмәһенең Ҡасҡын ауылы ҡатын-ҡыҙҙары махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугирҙарға сәк-сәк бешереп ебәрҙеләр.

«Был беҙҙең ярҙамдың аҙаҡҡыһы булмаҫ. Иң мөһиме, илебеҙгә тиҙерәк тыныслыҡ килһен, ир-егеттәребеҙ иҫән-һау әйләнеп ҡайтһын», - тиҙәр улар.

Ауыл халҡы һәр яҡлап әүҙем. Әлеге мәлдә санъяптар “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһында ҡатнаша, уға әҙерлек сиктәрендә ауылда төрлө мәҙәни һәм спорт саралары үтеп тора. Ниәттәре лә изге уларҙың – Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына арналған обелискыны төҙөкләндереү, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына оло тарихҡа эйә иҫтәлекле монументты яңыртыу.

**Р.ИШБУЛАТОВА.**